Ауыл хакимиәтенең һәм Советының эше һәм 131 –се "Рәсәй федерацияһында урындағы үҙидараны ойоштороуҙың дөйөм принциптары тураһында" ғы федераль законға, Уставҡа таянып башҡарыла һәм ауыл биләмәһе эсендәге мәсъәләләрҙе хәл итеүгә йүнәлтелгән.

Ауыл **Советының 2019 йылғы эшмәкәрлеге:**

- Үткән йылда 27-се саҡырылыштың 5 ултырышы үтеп, унда бөтәһе 17 ҡарар ҡабул ителгән, 28-се саҡырылыштың 4 ултырышы үтеп, унда 26 ҡарар ҡабул ителгән. Ҡарарҙарҙың күпселек өлөшөн урындағы бюджетка үҙгәрештәр индереү тәшкил итә, муниципаль милек, район хакимиәте менән килешеүҙәр төҙөшөү, ер һәм милек һалымдарына үҙгәрештәр индереү, муниципаль һәм техник хеҙмәткәрҙәрҙең хеҙмәте өсөн түләү тураһындағы положениеға үҙгәрештәр индереү, киләһе йылға урындағы бюджетты ҡабул итеү тураһында ҡарарҙар ҡабул ителгән.

**Депутаттарҙың эшмәкәрлеге буйынса,** 27-се саҡырылыш депутаттарына килгәндә, КФХ етәксеһе булараҡ Гадамшин Райман менән килешеүҙәр төҙөшөп, уның менән эш алып барылған.

2019 йылдың сентябрендә ауыл Советының 28 саҡырылыш депутаттары һайланды һәм уларҙың составында 6 –һы яңы депутат.

Алдағы йылдарҙа эшләгән биләмә башлығы Абубакиров Нуретдин Бәҙретдин улы үҙенең кандидатураһын ҡуймау сәбәпле, эштән сыҡты һәм 7 депутат араһынан яңы башлыҡ һайланып ҡуйылды.

- 28-се саҡырылыш депутаттары Советтың тәүге ултырышында түбәндәге даими комиссиялар буйынса һайландылар һәм шул йүнәлештә эш алып барырға тейештәр;

1. Бюджет, һалым, муниципаль милек, социаль- гуманитар һорауҙар һәм эшҡыуарлыҡты үҫтереү, торлаҡ- коммуналь хужалығы буйынса комиссия:

   Хәкимов Зәйнулла Сәғәҙәт улы, 7-се округ депутаты;

   Алгазин Хәлит Фәрит улы- 3-сө округ депутаты;

   Мирасов Айназ Зәбир улы- 6-сы округ депутаты.

2. Аграр мәсъәләләр, сәнәғәт, төҙөлөш, экология һәм ғәҙәттән тыш хәлдәр, хоҡуҡ һаҡлау, ерҙе һәм тәбиғәт ресурстарын тотоноу, һәм башҡа мәсъәләләр буйынса комиссия:

   Зарипов Хәсән Әхтәм улы- 4-се округ депутаты;

   Абдрахманова Гүзәлиә Рәҡит ҡыҙы- 2-се округ депутаты;

   Исламов Марсель Марат улы – 5-се округ депутаты.

**Хакимиәт.**

Хакимиәт урындағы мәсъәләләрҙе хәл итә, Федераль закондар һәм Башҡортостан Республикаһы закондары тарафынан тапшырылған айырым дәүләт вәләкәттәрен үтәү буйынса буйынса эштәр башҡара, ҡарарҙар, бойороҡтар ҡабул итә.

Шулай уҡ халыҡҡа түбәндәге хеҙмәттәрҙе күрһәтә:

- хужалыҡ китаптарына таянып белешмәләр, күсермәләр биреү;
- торлаҡ шарттарын яҡшыртыу буйынса иҫәпкә ҡуйыу;
- торлаҡ шарттары буйынса акттар төҙөү һәм характеристика биреү.

Был хеҙмәттәр административ регламенттарға таянып башҡарыла.

Нотариат буйынса түләүле хеҙмәттәр күрһәтелә, былтырғы йылдың 1 сентябренән васыятнамә төҙөү, күсемһеҙ милекте һатыу, бүләк итеү буйынса ышаныс ҡағыҙы яҙҙырыу бөтөрөлдө, уларҙы тик нотариустан ғына алып була.

2019 йылда хакимиәт башлығы исеменә бөтәһе 12 ғариза ҡабул ителеп, барыһыла ыңғай хәл ителгән. Уларҙың 8-ҙе хакимиәт хеҙмәткәрҙәренән булған.

1 хеҙмәткәр үҙ теләге менән эштән сығып, уның урынына 1 хеҙмәткәр алынды. 2 ғаилә торлаҡ шарттарын яҡшыртыу буйынса иҫәпкә ҡуйылған.

Ауыл биләмәһендә билдәле даталарҙы, байрамдарҙы билдәләп үтеү буйынса саралар үткәрелеп тора. Был сараларҙы үткәреүҙә ауылдағы шәхси эшҡыуарҙар, крәҫтиән-фермер хужалығы етәкселәре бағымсылыҡ күрһәтәләр.

***<u>Демографик күрһәткестәр:</u>***

| | <u>2018</u> | <u>2019</u> |
|---|---|---|
| Халыҡ һаны | 497 | 493 |
| Тыуым | 7 | 8 |
| Никах | 3 | 2 |
| Үлем осрағы | 7 | 4 |
| Эшһеҙҙәр һаны | 71 | 68 |
| Пенсия йәшендәгеләр | 74 | 72 |
| Күп балалы ғаиләләр- | 21 | 20 |
| | 5 бала м-н -1 | 5 бала м-н- 2, |
| | 4 бала м-н -9 | 4 бала м-н- 8, |
| | 3 бала м-н - 11 | 3 бала м/н – 10 ғаилә иҫәпләнә |
| **Хужалыҡтар һаны** - | 134 | 132 |

Ғаиләләр күсеп китеү, район үҙәгендә, башҡа районларҙа йәшәгәндәр прописканан төшөү сәбәпле халыҡ һаны, хужалыҡтар кәмей.

*Хужалыҡтарҙағы мал: 101 хужалыкта эре мөгөҙлө мал, 29 -да –аттар, 55 -дә һарыҡтар, 5-һендә- кәзә, 92 -дә ҡош-ҡорт, 15-дә- ҡорт ғаиләләре тотола. 5 хужалыҡ тик ҡош-корт, 2 хужалыҡ тик ат малдары ғына тота.*

*<u>2019 йылдың 1 июленә ҡарата алынған иҫәп буйынса</u>:*

| | ***2018*** | ***2019*** |
|---|---|---|
| Эре мөгөҙлө малдар | 579 | 588 |
| Кәзә, һарыҡ | 453 | 432 |
| Аттар | 95 | 101 |
| Ҡош-корт | 2196 | 1942 |
| Ҡорт ғаиләләре | 66 | 73 |

**Хужалыҡтар һәм ойошмалар буйынса**

Ауыл биләмәһендә 5 крәҫтиән-фермер хужалығы һәм 3 шәхси эшҡыуар теркәлеп, эш алып баралар.

1) Крәҫтиән- фермер хужалыҡтарында
65 баш эре мөгөҙлө мал, 32 баш йылҡы, 63 ҡош-ҡорт иҫәпләнгән.

2) Ойошмалар:
   - Әтек филилалы мәктәбе,
   - Балалар баҡсаһы,
   - Мәҙәниәт йорто,
   - Ауыл китапханаһы,
   - Фельдшерлыҡ пункты,
   - Почта бүлексәһе,
   - 4 шәхси эшҡыуарҙың магазины эшләп тора, почта бүлексәһендә лә көнкүреш тауарҙары һатыла.

Ауылда **социаль хеҙмәткәр** – Алгазина Фирүзә. Ул оло йәштәге 8 кешене ҡарай.
Үҙ эшен белеп, яҡшы алып бара.

**Йәмәғәт ойошмалары.**

Ауыл старостаһы – Зарипов Х.Ә., ауылдың имамы. Мәсет эшләп тора. Йома намаҙҙары, ғәрәп әлифбаһын өйрәтеү дәрестәре, дини байрамдар үтеп тора.

- Ветерандар Советы председателе Сөләймәнова Көһылыу Хәйбулла ҡыҙы.
- Ҡатын-ҡыҙҙар советы председателе Ишбаева Нурзия Әхмәтшәриф ҡыҙы.
- Ҡоролтай председателе Сөләймәнова Рәшиҙә Ғиләжетдин ҡыҙы.

Старостаның мөҙҙәте 4 йыл. Быйылғы йылда яңынан староста, ветерандар Советын, ҡатын-ҡыҙҙар советын һайлап ҡуйыу бурысы тора.

Халыҡтың мөрәжәғәте буйынса үткән йыл 4 тапҡыр газ баллондары килтереп таратылды.

**<u>Программаларҙа ҡатнашыу:</u>**

Урындағы инициативаларҙы үҫтереү прогррамаһында мәктәпткә капиталь ремонт проекты менән ҡатнаштыҡ, ләкин йыйылышта халыҡ һаны әҙ булыу сәбәпле, балдар һаны етмәне һәм үтә алманыҡ.

Быйыл клубтың иҙәндәрен алыштырыу проекты менән ҡатнашабыҙ. Әлеге көндә сметаһы эшләнеп, деффект ведомосы, акт төҙөлөп, дәүләт экспертизаһына ебәрелде. Һығымта килеүен көтәбеҙ.

Аныҡ эштәр программаһы буйынса балалар баҡсаһының ҡапҡаһы яңыртылды.

Быйылғы йыл был программаның аҡсаһы мәктәптең ашханаһын күсереүгә ҡушыла.

**<u>Янғын хәүефһеҙлеге:</u>**

Ауыл биләмәһендә, һәр өйҙә янғын хәүефһеҙлеген иҫкәртеү, һаҡланыу сараларын булдырыу мөһим. Был йүнәлештә йыйылыш һайын тәҡдимдәр еткерелде, иҫкәрмәләр таратылды, күп балалы ғаиләләргә, эскелек менән мауыҡҡандарға йөрөп сыҡтыҡ. Был эш быйылғы йылда ла дауам итәсәк. Республика ла янғын осраҡтары йыш теркәлә, унда кешеләрҙең һәләк булыуы кәмемәй.

Һәр өйҙә янғынды иҫкәртеүсе прибор булһын, алып ҡуйығыҙ. Былтыр хакимиәт аша күмәртәләп алдырыу буйынса тәҡдим индерелгәйне, берәүҙә мөрәжәғәт итмәне. 2017 йылдан алып ғариза нигеҙендә күп балалы ғаиләләргә. 2018 йылдан балаһы тыуған һәр ғаиләгә бирелә килә. 2019 йылда 55 йәштән үткән 25 яңғыҙ йәшәгән граждандарға ҡуйылды һәм ул артабан да дауам итә.

Янғын сығыуына юл ҡуймаҫҡа, уны иҫкәртеү, һаҡланыу сараларын алдан күрергә саҡырам. Бәләкәй балаларға ҡарата иғтибарлы булығыҙ, яңғыҙ йәшәгән туғандарығыҙҙы, күршеләрегеҙҙе лә күҙ уңынан ысҡындырмағыҙ.

Шулай уҡ, яҙ, йәй көндәрендә урмандар янып китә. Урманда йөрөгәндә лә янғынға ҡаршы ҡағиҙәләрҙе теүәл үтәргә кәрәк.

**<u>Урамдарҙы яҡтыртыу</u>**:

Бөгөнгө көндә ауыл урамдарын 31 лампочка яҡтырта. Наружное освещение тигән программа эшләй башланы, шул программаға 11 лампочка өҫтәү буйынса заявка бирелгән. Уның аҡсаһы йылына 2 биләмәгә бүленә, беҙҙең сират 2021 йылда.

Ҡыш көнө урамдарҙы ҡарҙан таҙартыу буйынса йылда КФХ етәксеһе Гадамшин Райман менән килешеү төҙөшәбеҙ. Ул ваҡытында үҙ эшен башҡара.

**<u>Көнкүреш ҡалдыҡтары буйынса:</u>**

Элекке ҡый түккән урын таҙартылып ҡуйылды, быйыл унда ҡый түгеү тыйыла. Ул урынға ағастар ултыртыу күҙаллана. Ҡый йыйыусы машина йөрөп тора. Ҡыш көнө контейнерҙарҙан алыуы ҡыйын булғанлыҡтан, тоҡлап йыйыу булһын тине улар үҙҙәре. Көндәр йылытһа контейнерҙарға һала башлайбыҙ. Машина килә торған көндән бер көн алда алып барып һалырға кәрәк. Ҡыйҙы ситкә ташламай, туҙҙырмай, тәртипле генә итеп һалып, контейнерҙың ҡапҡастарын ябып китеүегеҙ һорала.

Быйылғы йылда Дуҫлыҡ урамына тағы бер контейнер майҙансығы урынлаштырыу күҙаллана.

**<u>Күсемһеҙ милек буйынса:</u>**

Былтырғы йылда пай ерҙәренә документ алырға теләмәүсе кешенең ерен хакимиәт суд аша үҙ милегенә күсерҙе һәм быйылғы йылда документлаштырып ҡуябыҙҙа арендаға бирәбеҙ.

Өйҙәренә документ алмаған 76 хужалыҡ иҫәпләнек. Быйылғы йылда мотлаҡ ошо эште башҡарырға кәрәк буласаҡ халыҡҡа. Атай-әсәйҙәре мәрхүм булып, ерҙәре, өйҙәре оформить ителмәгәндәрҙә бар. Улар документ эшләтеүҙе нотариус аша башлайҙар.

<u>*</u> 2019 йыл Театр йылы тип билдәләнде. Был йүнәлештә мәҙәниәт йорто эш алып барҙы. Дилара Абдулхаевна үҙенең сығышында әйтеп үтер был турала.

Быйылғы йыл Республикабыҙҙа эстетика, йәғни матурлыҡ, таҙалыҡ йылы тип иғлан ителде. Ошоға ярашлы һәм ауыл Советының биләмә территорияһын төҙөкләндереү ҡағиҙәләрен раҫлау буйынса ҡарар проектына ярашлы үтәсәк экологик өмәләрҙә ихлас ҡатнашыуығыҙҙы һорайбыҙ. Үҙегеҙ йәшәгән территориянан тыш йылға буйҙарына ойошторолған өмәләрҙә лә актив ҡатнашырға кәрәк.

Йылға буйҙарында, түштә бура бураусылар, бура ултырған ерҙе, һеҙ бураны алғансы, ваҡытлыса арендаға алып торорға тейешһегеҙ. Шулай уҡ уның эргә – тирәһен таҙа тоторға бурыслыһығыҙ. Пилорам тотҡандарға ла ҡағыла былар.

Йылға буйынса утын ташып, туҙҙырып һалып ҡуйсыларҙа бар. Улар ҙа ошо ҡағиҙәләрҙе үтәргә тейеш. Шулай уҡ урам да йорт алдарына таҡта өйөп ҡумағыҙ. Былтыр эколог йылға буйҙарын, түште ҡарап сығып бер нисә кешегә штраф һалды.

**Бюджет үтәлеше буйынса:**

**Килем** өлөшө дөйөм 2707891, 32 һум тәшкил итә, үтәлеш 100,4 %;
- ошо сумма эсендә дотация 1444500 һум.;
- хәрби иҫәп алып барыу өсөн 77115 һум федераль бюджеттан күскән;
- юлдарҙы төҙөкләндереү өсөн акциз- 10000 һум;
- кире ҡайтарылмай торған, муниципаль райондан ингән килем – 245900 һум;
- биләмәнең налогтарҙан, дәүләт пошлиналарынан йыйылған үҙ килеме- 230376,32 һум, үтәлеш 105%;
- биләмә территорияһын төҙөкләндереү өсөн республика бюджетынан ингән килем 700000 һум.

**Тотоноу өлөшө:**
-Хакимиәт хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡтары һәм уға өҫтәлгән сумма- 1588989,7 һум;
- бәйләнеш һәм интернетка- 48400 һ.,
- компьютер программаларын яңыртыу өсөн- 11350 һ.,
- район хакимиәте күсергән 22850 һ. яңы компьютер алынды.
- контораның электроэнергияһына түләү – 3900 һ.,
- көнкүреш ҡалдыҡтарына түләү – 3021 һ.,
- машинаны страховкалау – 3463 һ.,
- гәзиткә яҙылыу, иғландар биреүгә- 9595 һ.,
- йыл башында һәм аҙағында утын алдырылған- 14000 һ.,
- ГСМ-ға – 103082 һ.,
- биләмәлә төрлө саралар үткәреүгә, оло йәштәге юбилярҙарҙы ҡотлауға, бүләктәр алыу өсөн- 5000 һ.,
- хакимиәттең милек һәм транспорт һалымын түләү өсөн- 25893 һ.,
- ауыл Советы депутаттарына һайлау үткәреү өсөн- 14000 һ.,
- хужаһыҙ объект, элекке фермаға техпаспорт эшләтеү 27612 һ.,
- кирбес алыу һәм мейес сығартыу- 15000 һ.,
- - янғын хәүефһеҙлегенең 10000 һ. һәм юлдарҙы төҙөкләндереү буйынса акциз 10000 һ. тотонолманы;
- Урал һәм Дуҫлыҡ урамдарына ҡуйылған лампочкаларҙы ялғау, приборҙарын урынлаштырыу – 12173 һ.,
- машинаға запчасть, хужалыҡ һәм канцелярия тауарҙары алыуға- 35200 һ.,

Республика бюджетынан күскән 700000 һ. аҡса:

- ҡар һөрөүгә- 32755 һ.,
- урамдарға ҡырсынташ түгеүгә 181160 һ.,
- урамдарҙы яҡтыртыуға- 33424 һ.,
- ҡый түгеү урынын таҙартыуға-103000 һ.,
- Урал һәм Дуҫлыҡ урамдарына өҫтәп лампочкалар ҡуйҙыртыу өсөн проект эшләтеүгә-80000 һ.,
- Урамдарҙы яҡтыртыуға ағымдағы ремонт эштәренә( фотореле алмаштырыу) – 15000 һ.,
- Төҙөлөш материалдары алыу- 2000 һ.,
- Баннер эшләтеү, урамдарға лампочкалар алыу - 23310 һ.,
- Контейнер майҙансыҡтары эшләтеү, контейнерҙар алыу- 229350 һ.

Үткән йылғы отчет йыйылышындағы һорауҙар буйынса:

1) Нуретдин Бадретдинович Әтек- Иҫке Собханғол юлына капиталь ремонт һораған- эшләнелмәне,
2) Баймухаметов Альберт мәҙәниәт йортона капиталь ремонт- эшләнелмәне,
3) Үҙемдең валежник буйынса һорау булған- Байғусҡаров Зариф Зәкир улы менән осрашыуҙа ул аңлатып үтте, валежник ул- ҡороп ҡолаған, көслө ел, ауыр ҡар баҫыу арҡаһында һынып ерҙә ятҡан ағастар. Уны әҙерләү өсөн бер ҡайҙан да рөхсәт алырға кәрәкмәй һәм йылдың һәр миҙгелендә лә алырға була. Ағас ҡырҡыу эштәре барған урындарҙан тыш бөтә ерҙән дә алырға була.

   Ләкин, ҡалған ботаҡтарҙы йыйыштырып өйөп китергә кәрәк.

4) Зарипов Хәсәндең ауылда кәрәҙле бәйләнеш урынлаштырыу тураһында һорауы булған. Вәғәҙә итеүҙәре буйынса былтырғы йылдың 4 кварталында урынлаштырылға тейеш ине. Ноябрь айында бағаналары урынлаштырылды, тоташтырыуҙы һуҙалар нишләптер.

1. Быйылғы йылда алдан әйтеп үтеүемсә экологик өмәләр ойоштороп, ауылды, унның тирә яғын ҡыйҙан таҙартыу, таҙа тотоу бурысы тора. Шулай уҡ йәшелләндереүҙе лә күҙ уңынан ысҡындырмаҫҡа кәрәк.
2. Еңеүҙең 75 йыллығына әҙерләнеү, уны юғары кимәлдә үткәреү.

Иғтибарығыҙ өсөн рәхмәт.

Ойошма етәкселәре быйыл йыллыҡ отчет менән үҙҙәре сығыш яһай, һүҙҙе уларға бирәм.